*Әхмәт* ***СӨЛӘЙМӘНОВ***

# “Урал батыр” ҡобайырына текстологик күҙәтеүҙәрҙән

## 1. Эпостарыбыҙҙа художестволы универсаллек ҡанунының күҙәтелеше хаҡында

Бер үк жанр йә төргә ҡараған ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыларында оҡшашлыҡтар, уртаҡлыҡтар булыуын һәм ошо оҡшашлыҡ менән уртаҡлыҡтарҙа айырмалыҡтар барлығын күҙәтергә мөмкин. Бындай күренешкә төрлө факторҙар сәбәп ҡылыуы ихтимал. Әҫәрҙе ижад итеүсе, һаҡлаусы халыҡ сит милләт репертуарынан алынғанды ла үҙенекеләй күреп файҙаланыусан. Тик бының өсөн бөтән халыҡ менән уның мәҙәни ҡомартҡыһын “үҙләштереүсе” милләттең этник сығышы тарихи яҡтан тамырҙаш, ҡәрҙәш булмаған осраҡтарҙа иһә уларҙың төрлө юлдар менән (алыш-биреш, күршелек, яу һ.б. арҡаһында) аралашыуҙары йә бер үк төрлө ихтыяждар, рухи талаптар кисереүҙәре, оҡшаш ситуацияларға юлығыуҙары, уларҙы хәл итеү өсөн, бер төрлөрәк алымдар, ысулдар ҡулланыуҙары, уртаҡлыҡҡа яҡын юлдар файҙаланыуҙары һәм, ахырҙа, иң мөһиме — ул этностарҙың милли фольклорында тема, мотив, сюжет һәм герой образындағы оҡшашлыҡтар булыуы шарт. Был факторҙарҙан тыш, уртаҡ һәм оҡшаш әҫәрҙәр төрлө халыҡтың ауыҙ-тел репертуарында ла һин дә мин йәшәп ятыуына шулай уҡ архетип законсылығы ла булыша.

Донъя халыҡтары эпостарында мотив, сюжет һәм образдар системаһы кимәлендә уртаҡлыҡтар күҙәтелә. Фольклор ғилемендә улар художестволы универсаллек күренеше тигән билдәләнеш алған [11, 8]. Художестволы универсаллек билдәләре “Урал батыр” ҡобайырында ла күҙәтелә, тик йә үҙ-үҙенә тәғәйен урындан ситтә йә йөкмәтке тулылығынан мәхрүм ителгән хәлдә. Мәҫәлән, *“мөъжизәци рәуештә тыуыу”* мотивы бар. Әммә ул үҙ урынын алмаштырып, әҙәбиәткә хас булғанса, ретроспектив планда ғына бирелә. Унда ла ҡобайыр ҡойоусы исеменән түгел, ә уның тыуыуын теләмәгән ауыҙынан әйттерелә. Уны дейеүҙәр батшаһы Ҡәһҡәһә менән йылан-аждаһалар батшаһы Әҙрәкә янындағы һынсы ҡарт дейеү хәбәр итә; *“балалыҡ батырлығы”* (“героическое детство”) мотивы бөтөнләй төшөп ҡалған; *“юлда осраған изге ҡарттың юл өйрәткәне”* мотивы, шул ҡарт менән Йәнбирҙенең уландарының танышыу мәле тулы асылмаған; был иһә йөкмәтке йәһәтенән сюжеттың аҡһауына сәбәп булған; *“юл өйрәтеүсе ап-паҡ һаҡалдың баҡыр һандығы”* мотивы бөтөнләй “уйнамай”; *“төп герой дәрәжәһе һәм ҡеүәте яғынан иң өлкән дошманы менән мотлаҡ алыша”* мотивы юҡ; *“яу атын ҡулға төшөрөү, уны өйрәтеү”, “яу атын эйәрләү”, “яу атының тасуирланышы”* ише “сюжет йәһәтенән тамамланмаған” йә “ирекле эпизодтар” (Е.А.Тудоровская ҡулланған билдәләмәләр) [1, 60] сәсәндәребеҙҙең иғтибарынан ситтә ҡалған. Улай ғына ла түгел, айырым деталдәр, персонаждар һәм йә тематик мотив (мини-сюжет), йә хатта тулы ҡанлы сюжет хасил итмәле эпизодтар “Урал батыр”ҙан төшөп ҡалып, “Аҡбуҙат”, “Ҡуңыр буға” эпостарына күскән.

Фәндә клише (уртаҡ урындар), йәнәшәлек (параллелизм), ҡабатлауҙар кеүек саралар эпос эстетикаһы өсөн ят түгел, ә мөһим традицион композиция саралары иҫәпләнә. Ҡабатлауҙар уртаҡ урындар рәүешендә бер әҫәр эсендә лә, төрлө әҫәрҙәрҙә лә күҙәтелергә мөмкин. Бындай күренештәр бигерәк тә әлегәсә тәүтормош шарттарында йәшәгән халыҡтар фольклорына, рус былиналарына хас. Уларҙың генезисы иһә көйләп әйтелгән ритмик һүҙ магияһына инанған бик боронғо дәүерҙәр менән бәйле. Улар күп тапҡыр (мәҫәлән, "Өлкән Эдда"ла оҡшашлыҡ 20 тапҡыр) төрлөсә (тема, һорау-яуап, формулалар, оҡшашлыҡ һ.б.) ҡабатлана [9, 19—20].

Башҡорт эпостары иһә клише-ҡабатлауҙарға үтә һаран. Хатта улар бөтөнләй күҙәтелмәй тиһәк тә хаҡ булыр. Быны ҡайһы берәүҙәр эпостарыбыҙҙың милли үҙенсәлеге тип атауы ихтимал. Хикмәт шунда: ундай әҫәрҙәребеҙ нигеҙҙә совет осоронда, айырыуса XX быуаттың икенсе яртыһында әҙәби ижад менән таныш һәм башлыса үҙҙәре лә ҡәләм тибрәтеүселәр тарафынан теркәлгән. Яҙып алыусыларҙың (айырым осраҡта зыялыларҙан булған информанттарҙың да) әҙәби фекерләүе лә, ундай күренештәрҙе тавтология тип иҫәпләүҙәре лә үҙенекен итмәй ҡалмаған, әлбиттә. Хәйер, быға XIX быуаттан да миҫалдар таба алабыҙ. Шул быуаттың башында "Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу" иртәгенә — Т.С.Беляев, уның урталарында "Заятүләк менән Һыуһылыу"ға В.И.Даль мөрәжәғәт иткән. Башҡорттоң эпик сюжеттарын рус яҙыусылары үҙҙәренең милли менталитеты һәм әҙәби фекерләү күҙлегенән, әҙәби күҙлектән эшкәртеп, интерпретациялауға дусар итеп, ташҡа баҫтырғандар. Шуның өсөн уларҙа ла клише (уртаҡ урындар), йәнәшәлек (параллелизм), ҡабатлауҙар кеүек сараларҙы табыуы ситен. Шулай ҙа М.А.Буранғоловтың, эпик әҫәрҙе һөйләй торғас, "Ғәбит сәсән уртала туҡтап ҡалып бүленһә, шул ерҙән ялғап китә алмай, яңынан башлай", тигәне иғтибарҙы тартмай ҡалмай. Ишеткәнен тиҙерәк ҡағыҙға теркәп ҡалырға тырышып тыңлаусы йәш фольклорсы булараҡ, Буранғоловҡа сәсәндең бер һөйләгәнен яңынан һөйләүе бүленгән урындан уның артабан ялғай алмай аҙапланыуы, кәрәкмәгән ҡабатлау һымаҡ тойолғандыр, моғайын. Шул тойғо Ғәбит сәсәндән Буранғолов яҙып алған әҫәрҙәрҙә "бүленгән ерҙән" "яңынан башланған", йәғни ҡабатланған урындар булмауына сәбәп ҡылғандыр. Клише — уртаҡ урындар, йәнәшәлек кеүек сараларҙың булыр-булмаҫлығы ла шуның менән аңлатылмаймы икән әле? Бындай шик тыуыуға, ҡабатлауҙарының "сәбәбен һораһаң", Ғәбит сәсәндең: "Мин донъяны онотам, ул кешене күҙ алдыма килтерәм дә үҙемде тик шул кешеләр менән бергә хис итәм. Улар менән бергә яуҙа булам. Ҡобайыр ҡайҙа илтһә — мин шунда. Шуның өсөн баштан төшмәй булмай", — тип яуап биреүе дәлил [4, 103]. Сөнки уның был яуабы, асылда — эпос башҡарыуҙы сәсәндең ижад тип таныуында, ижад процесында, тимәк, ҡабатлауҙарҙың ҡотолғоһоҙ һәм урынлы икәнен аңлатыуҙан ғибәрәт.

## 2. "Урал батыр" эпосының М.А.Буранғолов тулыландырған тексы хаҡында

Зыялыларыбыҙҙы айырыуса "Иҙеүкәй менән Мораҙым" ҡобайыры ныҡ йәлеп иткән. Үҙен тарихсы ла, телсе лә, фольклорсы ла тип таныҡкан мәшһүр мәғрифәтсе Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев уны яҡшы белгән. Тик, ни сәбәптәндер, XIX быуаттың икенсе яртыһында шул әҫәрҙән әйтеш рәүешендәге бер өҙөктө

ташҡа баҫтырыу менән генә сикләнгән [10, 181—184]. XX быуат баштарында Әхмәтзәки Вәлиди, Фазыл Туйкин, Хәбибулла Ғәбитов, Ғәбделәхәт Вилданов, Дауыт Юлтый, Сәғит Мирасов, Мөхәмәтша Буранғолов, Нәҡи Иҫәнбәттәр ҙә уның менән ҡыҙыҡһынған. Тик тәүгеһе был әҫәрҙең ҡайҙарҙа билдәле икәнен телгә алыу менән генә сикләнһә, һуңғылары өҙөктәр баҫтырыуҙан ары китмәгән. XIX—XX быуаттар сигендә, саф фольклорсылыҡ маҡсатынан сығып, А.Г.Бессонов, 1917 йылда Әбүбәкер Диваев шул уҡ эпостың ярайһы ғына тулы версияларын баҫтыра [3а, 39—179, 332—342; 3б, 111—338; 5, 8; 6, 46]. Әммә ул баҫмалар ҙа, М.А.Буранғолов тарафынан 1910 йылда яҙып алынған тип иҫәпләнгән "Урал батыр" ҡобайыры тексы кеүек үк, ҡабатлау-клишеларҙан азат (М.А.Буранғоловтың беҙгә мәғлүм бер генә яҙмаһында ла был әҫәрҙең ҡасан яҙып алыныуы әйтелмәгән). Уны яҙҙыртыусы Ғәбит сәсән Арғынбаев һәм Хәмит сәсән Әлмөхәмәтовтар иҫән саҡта, улар менән ҡайта-ҡайта осрашып, аҙналар, айҙар буйына ҡуна ятып, фольклор әҫәрҙәре яҙып алыуҙы дауам иткәнендә, был эпостың тексын камиллаштырыу өҫтөндә өсәүләшеп тә, М.А.Буранғолов үҙе лә ҡайта-ҡайта эшләгән булырға тейеш. Һәр хәлдә, көйләп-көйләп башҡарылышын, "һөйләгәндә (Ғәбит сәсәндең, мәҫәлән) үҙен-үҙе онота, көләр ерҙә көлә, илар ерҙә илап, әҫәрләнеп тора ла һалҡын һыу эсә, бик оҙаҡ һүҙһеҙ ҡала" икәнен, унан ҡурай уйнап алыуын [4, 102], йыш ҡына бер һөйләгәнен ҡабат-ҡабат башҡарыуын, ниндәйҙер урында Хәмит сәсән һүҙгә килеүен иҫәпкә алғанда, бер-ике осрашҡанда ғына эпос кеүек күләмле әҫәрҙең бөтә камиллығында тулы килеш яҙып алыныуы шикле.

Әйткәндәй, 1950 йылда милләтселектә ғәйепләнеп, 10 йылға лагерға оҙатылған ерҙән, амнистияға юлығып, 1954 йылда тотҡонлоҡтан ҡайтҡас та, ҡыҫымдар, ситләтеүҙәр һаман да дауам иткәнгә күрә, ғәҙеллек юллап, 1962 йылдың 13 апрелендә М.А.Буранғолов КПСС Үҙәк Ҡомитеты секретары М.А.Сусловҡа хат яҙа. Унда: "Я — фольклорист, в силу чего мне очень хорошо известен башкирский фольклор. В башкирском фольклоре есть более трехсот песен и легенд с соответствующей своей мелодией... Так же есть очень интересные героические эпосы", — тиһә лә, уларҙы исемләп һанап тормаған. Шулай ҙа шунда уҡ фольклор менән шөғөлләнеүенең ике йүнәлешен бик тә асыҡ итеп әйтеп ҡуйған: "Я, как фольклорист, с 1905 года начал собирать фольклорный материал и обрабатывать его". Үҙ ҡулы менән яҙған тәржемәи хәленең бер вариантында иһә шулай тигән: "Летом 1907, 1908 годов ездил по Башкирии во время дополнительной переписи среди башкир как переводчик. Используя этот момент, собирал башкирский фольклор". "Ғәбит сәсән" тигән очерктан (уның да ҡасан яҙылыуы мәғлүм түгел) аңлашылыуынса, тап шул дәүерҙә ул Ғәбит сәсән менән таныша. Уның хаҡында шулай тигән (цитаталар авторҙың ҡулъяҙмалары буйынса бирелде, пунктуация һәм орфография үҙгәртелмәне): "Ул унар табаҡлыҡ эпостарҙы һис туҡтауһыҙ яттан һөйләй ине. Мин уның менән 1907 йыл башлап таныштым. Мин ул саҡта фольклорҙың тарихи әһәмиәтен белмәй инем. Йырсыларҙан йырҙы, легенданы, эпостарҙы йәшлек һәүәҫкәрлеге менән генә, иптәштәр араһында әкиәт һөйләп ярышыу уйы менән генә яҙып ала инем. Ғәбит сәсән осрағансы, ҡобайыр, эпостарҙы образлы итеп уҡыусыға (*яттан башҡарыусыға. —* ***Ә.С.***) осрағаным юҡ ине. Ул мине әҫәрләндерҙе". Унар табаҡлыҡ (очерктың "Сәсән аманаты"нда баҫылған варианты буйынса, 7000 юллыҡ) эпостарҙы һис туҡтауһыҙ яттан

һөйләй алыуына 1907 йылда танышҡан сағында шаһит булғанмы, аҙаҡмы, ул хаҡта өндәшмәгән. “Ғәбит сәсән менән танышҡансы, ҡобайыр-эпостарҙы уның кеүек оҫта, образлы итеп уҡыған сәсәндәргә осрағаным юҡ ине”, — тигәнендә, ҡайһы әҫәрҙәрҙе күҙ уңында тотоуы ла беҙгә билдәһеҙ [4, 101]. Ғөмүмән, әле телгә алынған сығанаҡтарҙа “Урал батыр” эпосы хаҡында бер һүҙ ҙә юҡ. Шулай булғас, уның ҡасан яҙып алыныуы ла әйтелмәгәне аңлашыла торғандыр. Юғарыла күрһәтелгән очеркта ла был мәсьәләгә асыҡлыҡ индерелмәгән. Ә унда бындай һүҙҙәр бар: “Мин шунан (*йәғни 1907 йылдан.* — ***Ә.С.***) һуң Ғәбит сәсән менән 1910—1912 йыл Ырымбурҙа ике тапҡыр унар көн бергә булдым, 1918 йыл үҙендә — 15 көн, 1920 йылда 4 ай булдым. “Урал”, “Иҙел менән Яйыҡ”, “Аҡбуҙат”,“Һары мулла”, “Күсәк бей”, “Тамъян”, “Батырша”, “Ҡараһаҡал”, “Салауат” һәм башҡа күп эпостарҙы, күп йыр һәм легендаларҙы һөйләп биргән сәсән ул” [4, 102]. Һаналғандарҙан “Һары мулла”, “Тамъян”, “Күсәк бей”ҙең Буранголов яҙып алған варианты ла, “һәм башҡа күп эпостарҙы”, “күп йыр һәм легендаларҙы” тигәнендә ниндәй әҫәрҙәрҙе күҙ уңында тотҡанлығы ла беҙгә мәғлүм түгел. “Аҡбуҙат”тың иһә беҙгә хәҙерге Күмертау районы Урта Бабалар ауылынан Ғәтиәтулла Бикҡужиндан 1917 йылда ул яҙып алған варианты ғына килеп еткән.

М.А.Буранғоловтың: “Я... с 1905 года начал собирать фольклорный материал и обрабатывать его”, — тигәненә кире әйләнеп ҡайтайыҡ. Халыҡ сәсәне бушҡа ғына шулай тимәгән: тимәк, ул үҙе яҙып алған фольклор әҫәрҙәрен эшкәртер булған, был шөғөлөн ғүмер буйы дауам иткән. Ҡарамаҡҡа, һәр фольклорсы ла информант һөйләгәнде эшкәртә. Әҫәрҙең йөкмәткеһен, төп идеяһын икенсе төрлө интерпретациялауға юл ҡуймаҫлыҡ кимәлдә эшкәртеүҙе фән инҡар итмәй. Буранғолов иһә ҡайта-ҡайта эшкәртеү хаҡында һүҙ алып бара. Һис икеләнеүһеҙ, ул “эшкәрткән”дәр рәтендә “Урал батыр”эпосы ла булған, тип әйтә алабыҙ. Ни өсөн тигәндә, 1946 йылда яҙған тәржемәи хәлендә, мәҫәлән, был хаҡта асыҡ итеп былай тигән: “В 1944 г. была издана моя поэма “Кубаир”, отображающая героическую борьбу Кр[асной] Армии против немецких фашистов и великую дружбу народов Сов[етской] страны. Сейчас находится в производстве в Башкнигоиздате. “Кубаиры” — 2000 строк, рисующий героизм и самоотверженность народов Сов[етского] Союза в борьбе против немецко-фашистских извергов. В данное время работаю над продолжением этой поэмы и над героическим эпосом “Урал-батыр”. Әйткәндәй, тап шул йылда был әҫәр ВКП(б) Өлкә Комитетына Ә.Усманов яҙған докладта ла телгә алына. Унда шундай һүҙҙәр бар: “В институте хранится большой список героического эпоса с различными вариантами. Таковы: “Урал-батыр” в 4600 стихотворных строк, “Заятуляк”, “Кусякби”, имеющий до 10 вариантов, “Кузыйкурпес”, один из вариантов которого был опубликован еще в 1812 г. на русском языке...” [10, фонд 3, опись 1. ед.хр. 55. — С.55].

“Урал батыр” ҡобайырын яҙҙырған Ғәбит сәсән Арғынбаев 1921 йылғы йотлоҡта, Хәмит сәсән Әлмөхәмәтов 1923 йылда вафат була. Тимәк, уны 1910 йылдар тирәһендә тәүгеһенән яҙып ала башлап, XX быуаттың 20-се йылдары башынаса (үҙе әйткәнсә, 1920 йылда Ғәбит сәсән янында 4 ай торғанында) өсәүләшеп уның тексын теүәлләгәндәй булһалар ҙа, әле әйтелгәндән аңлашылыуынса, Буранғолов уны һаман камиллаштырыуын дауам иткән. Шул әҫәрҙе берсә “Урал” тип кенә (“Ғәбит сәсән” тигән очеркта), берсә “Урал ба-

тыры" ("Богатырь Урала") тип (Н.С.Хрущевҡа яҙған хатында), ахырҙа, 1946 йылда яҙған тәржемәи хәлендә генә "Урал батыр" тип атауына ҡарамаҫтан, Н.С.Хрущевҡа яҙған хатында уны "эпос "Урал батыры" ("Богатырь Урала"), "написанный мною", тип ысҡындырыуы ла М.А.Буранғоловтың ошо әҫәрҙе ҡайта-ҡайта эшкәртеүенә дәлил [10, ф.25, оп.1, ед. хр. С.13—40, 57—59 һ.б.]. Бәлки, ул "записанный мною" тип әйтергә уйлағандыр? Әммә халыҡ сәсәненең шунда уҡ: "...я написал о Великой Отечественной войне эпос", — тигәне һәм 1964 йылда яҙған тәржемәи хәлендә: "Из своего архивного материала мною составлен героический эпос о башкирском батыре (Ҡараһаҡал, Мәргән, Аҡбуҙат, Салауат) в объеме 10 п.л.", — тип әйткәне тағы уйға һала. Тимәк, "эпос "Урал батыры" ("Богатырь Урала"), "написанный мною" тип, ошо әҫәрҙе халыҡ сәсәне ҡайта-ҡайта эшкәртеп кенә ҡалмаған, ә уны яңынан яҙған, тип һығымта яһарға мәжбүрбеҙ. "Урал батыр" эпосын ҡайта-ҡайта эшкәртһә лә, үкенескә ҡаршы, М.Буранғолов әҫәрҙең 1700 юлында "Ир бөтмәһә, ил бөтмәҫ" мәҡәлен "Ир бөтһә лә, ил бөтмәҫ" рәүешендә ҡалдырған. Ул хатаны тәржемәселәр ҙә ҡабатлаған: "Хоть исчезнет батыр, но не исчезнет народ". Һүҙ ыңғайында шуны әйтергә кәрәк: "исем" мәғәнәһендәге "ат" һүҙен тәржемәселәр "конь" һүҙенә әйләндерҙе. Урал батыр васыятындағыһы төҙәтелде. Ә бына 3833-сө юллыҡтағы "Яуызлыҡты ат иттек" һөйләме "Зло сделал своим конем" тип тәржемә ителгән. Быныһында М.Буранғолдоң ҡыҫылышы юҡ. Иҫән булһа, тәржемәселәрҙең тетмәһен тетер ине. Ғөмүмән, "Урал батыр"ҙы эшкәртеү менән бер М.А.Буранғолов ҡына түгел, башҡалар ҙа шөғөлләнгән. РФА-ның Өфө фәнни үҙәгендәге ғилми архивта "фонд №3. Опись №2. ед. хр. 140" тип тамғаланған һәм "Российская академия наук, Уфимский научный центр, Институт истории, языка и литературы" тигән бер папка шуға дәлил. Уның титул битендә шундай яҙыуҙар бар: "Дело №140, индекс №673, 674. Урал батыр. Башкирский народный эпос. На баш. яз. Записан М.Бурангуловым. Подготовлен к изданию А. Харисовым. Здесь же перевод на русский язык, сделанный А.Х.Хакимовым в 1968 г. Начато [в] 1941 г. Окончено [в] 1968 г. на 450 листах, хранить пост." 1950 йылда партия органдарының тырышлығы, ҡәләмдәштәренең ҡотҡоһо арҡаһында, ун йыллыҡ тотҡонлоҡҡа дусар ителгән М.А.Буранғоловтың фатирында тентеү яһала. Ана шул саҡта ГПУ-сылар тартып алған "Ашҡаҙар", "Йәш йөрәктәр", "Ялан Йәркәй", "Башҡорт туйы", "Гөлсәсәк", "Иҙеүкәй менән Мораҙым", "Осрашыуҙар", "Көтөлмәгән хәбәр", "Шәүрәкәй", "Тулҡынлы көндәр", "Ысын мөхәббәт" драмалары, "Исемһеҙ хат" пьесаһының планы, "Туҡтар менән Гөлнур", "Мәргән", "Ашҡаҙар" операларының либереттолары, "Тыуған ил" (рус телендә), "Ватан һуғышы", "Закон турында" ҡобайырҙары, "Ҡуҙыйкүрпәс"тең ике данаһы менән бергә "Урал батыр" һәм "Иҙеүкәй менән Мораҙым" эпостары ла була. ГПУ хеҙмәткәрҙәре халыҡ сәсәненең йәнә өс дөйөм дәфтәрҙән торған ҡулъяҙмаһын, өс блокнотын тартып ала. Һуңынан "Исемһеҙ хат"тың планы, "Осрашыуҙар", "Көтөлмәгән хәбәр" пьесалары, өс ҡобайыр теркәлгән ҡалын дәфтәрҙәр менән "Урал батыр" сәсәндең ҡатынына кире ҡайтарыла. (Был мәғлүмәттәр тарихсы Булат Хәмиҙуллиндың "Дело №2760" тигән яҙмаһынан алынды). Әммә улар ҙа эҙһеҙ юғала. Бының сәбәбе 1960 йылда КПСС Өлкә Комитетының беренсе секретары Зыя Нуриевҡа М.А.Буранғолов үҙе яҙған хаттан яҡшы аңлашыла: "Мин үҙем ҡулға алынғас, үҙенең район прокуроры булыуы менән файҙаланып, минең ҡарсыҡты төрлө провокациялар менән ҡурҡытып, Вәлиев Ағзам тигән

берәү квартираны алып, ҡарсыҡты бер ниндәй условиеһы булмаған бер бүлмәгә тыҡҡас, библиотекам һәм мебелдәрем, бында һыймауы арҡаһында, элекке квартирамда ҡалыу айҡанлы, бөтәһен туҙҙырып бөткән".

М.А.Буранғолов әҫәрҙәренең һаны әле килтерелгән исемлек менән генә сикләнмәй. Үҙе яҙыуынса, ул йәмғеһе илленән ашыу әҫәр (пьесалар, ҡобайырҙар) ижад иткән. Үҙ заманында был әҫәрҙәр уны күренекле әҙип итеп таныҡҡан. Шуға ла ул яҙып алған фольклор әҫәрҙәрендә, шул иҫәптән эпостарҙа ла әҙәби фекерләү эҙемтәләре булыуына һис тә аптырайһы түгел. Бындай йоғонтонан "Урал батыр" ҡобайыры ла азат түгел. Ләкин М.А.Буранғоловтың фольклор әҫәрен, үҙе әйтмешләй, эшкәртеүен дә, уға "ҡул тығыуын" да, эпос төҙөүен дә шелтәләргә тел бармай. Сөнки ул үҙе лә иң элек сәсән булған. Сәсәндең иһә быға хаҡы бар. Халыҡ тарафынан да, рәсми рәүештә лә халыҡ сәсәне тип танылғанының — ифрат та.

### 3. "Урал батыр" эпосының "төп нөсхәһе"нең яҙмышы

Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө фәнни үҙәгенең ғилми архивында "Урал батыр" ҡобайырының латин графикаһында (аңлашылыуынса, XX быуаттың 30-сы йылдарында) машинкала баҫылған вариантының өсөнсө данаһы ғына һаҡлана. Шартлы рәүештә булһа ла, шул берҙән-бер күсеректе "төп нөсхә" тип алырға тура килә. Сәсәндең үҙ ҡулы менән булһа кәрәк, унда ҡара менән ҡайһы бер орфографик, пунктуацион һәм лексик яҡтан төҙәтмәләр индерелгән, төп йөкмәткегә зыян килмәҫлек кимәлдә айырым ҡобайыр юлдары өҫтәлгән. Уның ҡарауы, һүҙ барған әҫәрҙе беренсе тапҡыр ташҡа баҫтырырға әҙерләгәндә, фольклорсы, әҙәбиәтсе һәм телсе Әхнәф Харисов менән күренекле шағирыбыҙ Баязит Бикбай был тәңгәлдә иркен генә эш иткән. "Төп нөсхә"нең бәғзе ерендә айырым һүҙҙәр, тотош шиғыр юлдары өҫтәп йәки булғанын төҙәткеләп йә һыҙып ташлаһалар ҙа, инеш һүҙҙәрендә: "Урал батыр" эпосының тулы тексын бирәбеҙ", — тип иҫкәртеү яһағандар. Төҙәтеү менән артыҡ мауығыу һөҙөмтәһендә әҫәрҙең мәғәнәһенә бер аҙ зыян килгән: төп нөсхәлә "аҡһаҡал", "Үлем", "тартынған", "күп", "бысағыны ҡайраған", "Ҡарт бынан һуң һиҫкәнгән" кеүек һүҙ һәм һүҙбәйләнештәр "яран", "Әжәл", "оялған", "мул", "Бабай бысаҡ ҡайраған", "Ҡарт был хәлдән һиҫкәнгән" тип алмаштырылған. Үҫмер Уралдың төп нөсхәлә Шүлгән ағаһына:

"Бер ил гиҙеп йөрөмәйенсә,
Ысынлап та донъяла
Үлем юғын күрмәйенсә,
Суҡмар алып ҡулыма,
Һис бер йәнде һуҡмамын", —

тигәне тәүге баҫмала бына нисек бирелгән:

"Бер ил гиҙеп йөрөмәйенсә,
Ысынлап та донъяла
Әжәл барын күрмәйенсә,
Суҡмар алып ҡулыма,
Һис бер йәнде һуҡмамын" [3, 30; 12, 50].

"Төп нөсхә" буйынса [10, ф.3, оп.2, ед.хр. 140], Урал Үлемде үлтереп, Ер йөҙөнән юҡ иткән саҡты күрергә ниәтләнеүен әйтә. Тәүге баҫма, Әжәлдең барлығын белеү — Уралдың төп маҡсаты, тигәндәй булып, батыр буласаҡ

үсмерҙең ниәт-маҡсатын үтә нығ тарайтҡан. Мәғәнәгә хилафлыҡ ҡылынғанмы? Эйе, ҡылынған. Ә инде “Үлем” һүҙен ғәрәп теленән килеп ингән “Әжәл” һүҙе менән алмаштырыу мифологик эпосты йәшәртеү менән бер. Сөнки ул һүҙҙең телебеҙгә үтеп инеүе бабаларыбыҙҙың ислам динен ҡабул итеүе менән бәйле. Шул арҡала “Урал батыр” эпосы башҡорттар шул дингә күскәс тыуған тигән фекергә ек ҡалдырыла.

Үҙен үлемдән ҡотҡарғаны өсөн, Урал батырҙы ҡунаҡҡа алып ҡайтырға булғас, йылан батшаһы Ҡәһҡәһәнең улы Зәрҡүм уны йотоу, атаһының яҙаһынан ҡотолоу тураһында аҫтыртын уй төйнәй. Шул турала “төп нөсхә”лә былдай шиғри юлдар бар:

“Тигән уйҙы уйлаған,
Тик Уралға әйтмәгән.
“Атам эҙләтә икән”, — тип,
Ул Уралды алдаған.
“Әйҙә, егет, барайыҡ,
Беҙҙә ҡунаҡ булайыҡ,
Атайымдан бүләккә
Мин әйткәнде һорайыҡ,” —

тип Уралды өндәгән [10, 12, ф.3, оп.2, ед.хр. 140. — 205-се б.].

Тәүге баҫмала ошоларҙың 3-сө юллығы төҙәтелгән, тәүге икәүһе менән һуңғылары һыҙып ташланған. Улар урынына ябай ҡәләм менән: “Ә Уралға ҡысҡырып: “Атай (*ҡараламала шул уҡ ҡул менән “Атайым” тип төҙәтелгән. —* ***Ә.С.***) мине эҙләтә икән, әйҙә, егет, беҙгә барайыҡ, атайымдан мин әйткән бүләкте һорарға онотма...” — тигән” тип үҙгәртелгән [11 82]. Ғөмүмән, икенсе төрлө итеп төҙәтелеп йә төҙәтелмәйенсә лә, шиғри юлдар байтаҡ урында һыҙып ташланған.

Йәнә бер миҫал. Ҡатил батша ҡоторҡҡан дейеүҙәй дүрт батыр “төп нөсхә”лә Уралға:

— Алышҡамы, тартышҡамы?
Һайла берҙе, — тигән, ти.

Урал иһә уларға:

— Үҙегеҙ әрәм булмағыҙ,
Үҙегеҙҙән көслөрәк
Берәй хайуан һайлағыҙ, —

тип яуап бирә. Тәүге баҫмала был юлдар шулай тип үҙгәртелгән:

— Алыштанмы, тартыштанмы?
Һайла берҙе, — тигәндәр.
— Әрәм булып ҡуймағыҙ,
Тәүҙә шуны уйлағыҙ! [10, ф.3, оп.2, ед.хр. 140. — С.37].

Аңлашылыуынса, “төп нөсхә”лә яуыз батшаның батырҙарына Урал үҙҙәренә альтернатива табырға тәҡдим итә. Тимәк, уларҙың ғүмерен һаҡларға теләүен аңғарта. Ошо ғәмәле үк уның изгелекле кеше, яуыз түгеллеге хаҡында һығымта яһарға форсат бирә. Йәншишмә артынан оҙайлы юлға сығырҙан алда ауҙан алып ҡайтҡан аҡҡошто салырға атаһы бысаҡ ҡайрағанда, Шүлгән ағаһы уны ашау яғын ҡайғыртҡанда, Урал уның ҡотолоуына сәбәп итә. Шул да, бүтән изгелектәре лә ҡеүәтләй был фекерҙе һәм ҡобайырҙы беренсе булып рус теленә поэтик тәржемәләүсе күренекле шағирыбыҙ Ғәзим Шафиҡовтың:

“Урал батырға ҡан көҫәү хас түгел”, — тигәнен раҫлай. Әле килтерелгән миҫалдарҙан күренеүенсә, бер генә һүҙҙе алмаштырыу һөҙөмтәһендә Урал батырға Ҡатил батша батырҙарына янаусы роле йөкмәтелгән. Айырма бармы? Бар, әлбиттә. “Урал батыр” ҡобайырын башҡорт һәм рус телдәрендә Мәскәүҙә баҫтырырға әҙерләгәндә лә, үкенескә ҡаршы, урыны-урыны менән “төп нөсхә”нән ситләшеп, тәүге баҫмалағы төҙәтмә һәм өҫтәлмәләргә урын бирелгән [2, 55—160].

Тәүге баҫманың ғилми архивта һаҡланған ҡараламаһындағы оҙатмала: “Урал батыр” эпосы “Ағиҙел” журналының 1968 йыл 7-се һанында (*дөрөҫө, 8-се һанында. — **Ә.С.***) баҫылып сыҡҡан, 10-томлыҡ (*асылда, 18 томлыҡ. — **Ә.С.***) “Башҡорт халыҡ ижады”ның 1-се томына һәм Мәскәүҙә әҙерләнгән “Башкирские эпические сказания” (дөрөҫө — “Башкирский народный эпос”) йыйынтығына ингән. Текстағы төҙәтмәләр Баязит Бикбай ҡулы менән индерелгән”, — тип әйтелгән [10, ф.3, оп.2, ед.хр. 140]. Тәүге баҫма алдынан бирелгән инеш һүҙҙә иһә: “Журналдың был һанында беҙ “Урал батыр” эпосының тулы тексын бирәбеҙ. Уны филология фәндәре докторы, БАССР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре Әхнәф Харисов менән шағир-драматург, БАССР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Баязит Бикбай баҫырға әҙерләне”, — тигән иҫкәрмә бар [13, 48].

Әле әйтелгәндәр барыһы ла ата-бабаларыбыҙҙың “Урал батыр” тигән ҡиммәтле ҡомарҡыһына битараф булмаған текстологтар алдында уның “төп нөсхә”һе менән тәүге баҫмаһын сағыштырма юҫыҡта энәһенән-ебенәсә тикшереү бурысы тора икәнен аңлата булыр. Был тәңгәлдә эш фронты киң генә. Нисек кенә булмаһын, ул ҡомарҡыны халҡыбыҙға иң тәүҙә Әхнәф Харисов менән Баязит Бикбай ҡайтарыуын рәхмәт тойғоһо менән иҫтә тоторға кәрәк. Ошо эшкә тотоноусылар тәүге баҫманың боронғо ҡомарҡыны яңыса танып белергә тырышыу, руссалап әйткәндә, уға яңы “прочтение” яһарға тырышыу һөҙөмтәһе булыуын нигеҙле итеп асыҡлай алыр ине. Шәүрә Шәкүрованың “Урал батыр” монографияһында был тәңгәлдә тәүге аҙым яһалды ла инде. Әйткәндәй, һүҙ барған проблема менән ҡыҙыҡһыныусылар шул китаптың ҡушымтаһында “төп нөсхә”нең фотокүсермәһе һәм ТТӘН-ң фольклор бүлеге хеҙмәткәре филология фәндәре кандидаты Гөлнар Юлдыбаева әҙерләгән факсимеле (Өфө, 2015) менән таныша ала.

### 4. “Урал батыр”ҙың “төп тексы”ның халыҡҡа ҡайтарылғаны

Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры Зиннур Ураҡсин һәм “Китап” нәшриәте директоры Ғәлим Хисамовтың ҡултамғалары һәм шул ике учреждениеның мисәте менән нығытылған килешеүгә ярашлы, 1993—2000 йылдар эсендә халҡыбыҙға “Башҡорт халыҡ ижады”ның 30—35 томдан торған яңы баҫмаһы бүләк ителергә тейеш ине. 2002 йылда Башҡортостан Хөкүмәте ҡабул иткән “Башҡортостан республикаһы халыҡтарының фольклорын өйрәнеү, тергеҙеү һәм үҫтереү буйынса программа” уны 55 томға еткереү бурысын ҡуйҙы. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, төрлө сәбәптәр арҡаһында был изге башланғыс тулыһынса тормошҡа ашырылманы. Хыялдағы ана шул күп томлыҡтың эпостарҙан торған 3-сө томында (1998) тәүге тапҡыр “Урал батыр”ҙың М.А.Бурանғолов төҙәтмәләр индергән “төп нөсхә”һе донъя күрҙе. Баҫмаға әҙерләгәндә, текстологик күҙлектән сығып, уны ошо юлдарҙың авторы

үҙенең стажеры Ш.Р.Шәкүрова менән ентекләп ҡарап сыҡҡайны. Беҙгә лә кәрәкле урында торорға тейешле кәрәкле һүҙҙәрҙе өҫтәргә тура килде: тик, эпосты "Ағиҙел" журналында тәүләп баҫтырыусыларҙан айырмалы рәүештә, һыҙғылауға юл ҡуймаҫҡа тырышып, әҫәр логикаһы талап иткән кимәлдә һәм фәндә ҡабул ителгән тәртиптә, ҡырлы йәйәләр эсендә генә, унда ла, төҙәтмә һәм өҫтәмәләр күҙгә бәрелеп торһондар өсөн, улар курсив менән бирелде. Бер-ике миҫал. Урал йыйған ҡош-ҡорт йыйынында башҡа йән эйәләрен ризыҡ итеүселәр һаналғандан һуң: "Бары (*бөтәһе лә.* — ***Ә.С.***) йыртҡыс хуп күргән", — тиелә. Аңлашылалыр, синтаксик яҡтан ҡарағанда, был һөйләмдә тултырыусы етмәй. Әҫәрҙең йөкмәткеһе буйынса, ул йыйында тәүҙә Ҡоҙғон, шунан Һайыҫҡан телмәр тотоуы әйтелә. Шуға күрә лә тултырыусы талап иткән буш урынға бына былдай өҫтәмә кәрәк тип табылды: [*Ҡоҙғон, һайыҫҡан әйткәнен*] [3, 37]. Артабан былдайыраҡ өҫтмәләр индерелде: "Көн, [ *аҙна*], ай, йыл һанап" [3, 39]; "Кеше ҡанын ҡойорға [*Ҡанын ҡойоп, йәнен*] Алырға юл ҡуймамын" [3, 43] һ.б.

## 5. Тарауыл тигән сәсәндең булғаны һәм уның Урал батыр образы тирәһендә цикл хасил итеүсе эпостарҙы бер бөтөн художестволы берәмек итеп ойоштороу ихтималлығы

Фольклор әҫәрҙәре төрлө принципҡа ҡоролған циклда хасил ителеүгә әүәҫ. Мәҫәлән, йола байрамдары, тотош халыҡ ижады күҙлегенән ҡарағанда, үҙҙәре бер циклды тәшкил итә. Ә инде үткәрелеү мөҙҙәте буйынса улар яҙғы (Науруз, Ҡарға бутҡаһы, Ҡымыҙ тәме әйтеү, Кәкүк сәйе, Һабантуй), йәйге (Йыйындар, Йәйге Нардуған, Көнгәккә сығыу, Бәпембә байрамы), көҙгө (Сөмбәлә), ҡышҡы (Һуғым байрамы, Ҡаҙ өмәһе, Ҡышҡы Нардуған) миҙгел байрамдарына бүленә. Бөгөнгө көндә йыл миҙгеленең теләгән мәлендә үткәрмәле һәм күп яҡтан уртаҡ һыҙатлы "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!", "Шәжәрә байрамы", "Салауат йыйыны" кеүек байрамдар уҙғарыла.

"Урал батыр", "Иҙел менән Яйыҡ", "Аҡбуҙат", "Минәй батыр менән Шүлгән батша" сюжеттары һәм "Ҡуңыр буға" эпосының Мөғәлләм сәсән Мирхәйҙәров версияһы араһында логик һәм хронотоп йәһәтенән, берләшеү үҙәге, персонаждар составы, быуындар алмашына килеүе, тема үҫтерелеше яғынан да идея кимәлендә уртаҡлыҡтарға эйә. Шулар барыһы ла уларҙы Урал батыр образы, Шүлгән тирәләй ойошҡан эпостар циклы, хатта ки әле килтерелгән теҙем эҙмә-эҙлелегендә ҡалғандарын тәүгеһенең дауамы, оло бер художестволы бер бөтөн тип ҡарамалы берәмекте (сюжетты) тәшкил итеүсе өлөштәр тип иҫәпләргә форсат бирә. Ошо форсатты файҙаланып, "Оло "Урал батыр" тигән йыйылма текст төҙөгәндә, Көнбайыш, айырыуса Балтик буйы илдәре белгестәренең һәм үҙебеҙҙән Мөхәмәтша Буранғолов, Ғайса Хөсәйеновтарҙың йыйылма тәнҡиди эпик текст төҙөү тәжрибәһе лә иҫәпкә алынды. Шулай ҙа ул эпостарҙы эҙмә-эҙлеккә килтергәндә, ялғау һораған урындары барлығы беленде. Уларҙы ҡырлы йәйәләр эсенә алып, курсив менән бирелгән өҫтәмәләр ярҙамында ялғай барҙыҡ.

"Ерәнсә сәсән" тигән әҫәрҙең инешендә М.А.Буранғоловтың: "Беҙҙеңсә, Ерәнсә сәсән — тормошта булған шәхес. Ул "Иҙеүкәй менән Мораҙым" эпосындағы йөҙ туҡһан йәш йәшәгән Һабрау ҙа, "Урал батыр", "Аҡбуҙат" эпосындағы һәм "Дүрт батыр"(?) экиәтендәге Ер менән бергә яралған Тарауыл сәсән дә түгел", — тигән [4, 53]. Тимәк, ул эпостарҙың М.А.Буранғолов белгән

тулы версияларында был образға Урал батыр образы тирәһендә хасил булған эпостар циклын композицион яҡтан бер-береһенә яҡынайтыу, уларҙы ойоштороу бурысы йөкмәтелгән булған. Әммә "Урал батыр"ҙың да, "Аҡбуҙат"тың да беҙгә мәғлүм версияларында тасуирланған ваҡиғаларҙа (һуңғыһында ғына Тарауыл тигән һарыҡ көтөүсеһе булыуын иҫәпкә алмағанда) ундай сәсән ҡатнашмай. Шуны һәм әлеге Тарауыл атлы көтөүсенең, үтә ҡыҫып ҡына, Урал батырға бәйле сюжеттың фабулаһы менән Һәүбәнде таныштырыуын һәм ҡобайырҙан төшөп ҡалған ваҡиғаларҙы ла телгә алыуын иҫтә тотоп, уны сәсән кимәленә еткереүгә тырышлыҡ һалынды. Уның образын индергәндә лә, ялғаусы өҫтәмәләргә урын биргәндә лә, художестволы универсаллек ҡанунының методик һәм методологик талаптарына ярашлы эш ителде.

## ӘҘӘБИӘТ


1. *Аникин В.П.* Теория литературы: курс лекций. — М., 2007. — 432 с.

2. Башкирский народный эпос / сост. А.С.Мирбадалева, М.М.Сагитов, А.И.Харисов; авт.исслед. А.С.Мирбадалева; авт.коммент. А.С.Мирбадалева, М.М.Сагитов; башк. тексты подготовили М.М.Сагитов, А.И.Харисов; пер. Н.В.Кидайш-Покровской и А.И.Хакимова; отв. ред. Н.В.Кидайш-Покровская. — М.: Наука, 1977. — 519 с.

3. Башҡорт халыҡ ижады / төҙ. Ә.М.Сөләймәнов; инеш мәҡ. авт. М.М.Сәғитов; һүҙ ахыры Ә.М.Сөләймәнов менән Р.Ф.Рәжәповтыҡы; аңлатмалар, һүҙлек авт. М.М.Сәғитов һәм Ә.М.Сөләймәнов; яуаплы мөхәрр. Н.Т.Зарипов. — Өфө: Китап, 1998. — 3-сө том: эпос. — 448 б.

3а. БХИ / төҙ., инеш мәҡ., аңлатмалар, һүҙлек авт. Н.Т.Зарипов; яуаплы мөхәрр. З.Ғ.Ураҡсин. — Өфө: Китап, 2000. — 5-се том: тарихи ҡобайырҙар, хикәйәттәр (иртәктәр). — 39—179-сы, 332—347-се бб.;

3б. БХИ / төҙ., инеш мәҡ., аңлатмалар, һүҙлек авт. Ә.М.Сөләймәнов; яуаплы мөхәрр. Р.Т.Бикбаев. — Өфө: Китап, 2006. — 8-се том: эпос: иртәктәр һәм эпик ҡобайырҙар. — 492 б.

4. *Буранғолов Мөхәмәтша.* Сәсән аманаты / төҙ., баш һүҙ авт., яуаплы мөхәрр. Берйән Байымов. — Өфө: Китап, 1995. — 352 б.

5. *Вәлиди Әхмәтзәки.* Хәтирәләр: Төркстандың һәм башҡа көнсығыш төрөктәрҙең милли булмыш һәм культура өсөн көрәше. — Өфө: Китап, 1996. — 656 б.

6. *Вәлиди Әхмәтзәки.* Әҫәрҙәр / тәрж., аңлатмалар биреүсе һәм инеш һүҙ авт. Әхәт Сәлихов. — Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1996. — 216 б.

7. *Мелетинский Е.М.* "Эдда" и ранние формы эпоса. — М.: Наука, 1968. — 364 с.

8. *Өмөтбаев М.И.* Йәдкәр / текстол. эштәрҙе башҡарыусы, төҙ., баш һүҙ яҙыусы, аңлатмалар бир. Ғ.С.Ҡунафин; яуаплы мөхәрр. Ғ.Б.Хөсәйенов. — Өфө: Башҡортостан кит. нәшр., 1982. — 288 б.

9. *Петросян А.А.* О героическом эпосе народов Советского Союза // Героический эпос народов СССР. — М.: Изд-во худ. лит.,1975. — 6—28 с. (560 с.).

10. Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең ғилми архивы.

11. Урал батыр // Ағиҙел. — 1968. — №8. — 48—92-се бб.

12. *Хәмиҙуллин Булат.* 1932—1945 йылдарҙағы сәйәси цензура һәм Мөхәмәтша Буранғолов // Шоңҡар. — 2001. — №3. — 58—66-се бб.

13. *Шәнгәрәева Сәтиға.* Сәсәндең бай мираҫы // Совет Башҡортостаны. — 1988. — 23.12.

14. *Шәрипова Зәйтүнә.* Арҙаҡлы шәхесебеҙ һәйкәлгә лайыҡ // Башҡортостан. — 2013. — 27.12.